В-49435

Ф. Хисамитдинова

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК ДЛЯ МАЛЫШЕЙ



В-49435

Ф. Хисамитдинова

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК ДЛЯ МАЛЫШЕЙ

# КЕСКӘЙҘӘР ӨСӨН БАШҠОРТ ТЕЛЕ



Родной библиотеке от автора — Ф. Хи
19.12.2002

Научное издательство
"Башкирская энциклопедия"
Уфа—2002

431 (башк) (07) + 431 (башк) (07)

ББК 74.268.11
Х 54
УДК 811.512.141

*Рецензенты:* к.ф.н. М.И. Дильмухаметов
Н.И. Асадуллина

Иллюстрации И. и М. Ахмадуллиных

**Хисамитдинова Ф.Г.** Башкирский язык для малышей.— Уфа: Башкирская энциклопедия, 2002.— 120 с., ил.

Иллюстрированное тематическое пособие по башкирскому языку.

Рекомендуется для обучения детей дошкольного и младшего школьного возраста.

В 49435
Научная библиотека УНЦ РАН

ISBN 5—88185—035—1

© Хисамитдинова Ф.Г., 2002
© Ахмадуллин М., Ахмадуллина И., иллюстрации, 2002
© Научное издательство "Башкирская энциклопедия", 2002

**Дорогие мамы и папы, бабушки и дедушки!**

**Уважаемые воспитатели!**

Перед вами пособие, по которому малыш начнёт совершать первые шаги в изучении башкирского языка. Делать это будет нелегко. Но наглядность и красочность книги, ваше терпение и любовь превратят обучение в занимательную игру, помогут малышу легко и быстро усвоить основы разговорного башкирского языка.

Вы самые близкие люди ребёнка! Вспомните слова А. де Сент-Экзюпери: “Ты навсегда в ответе за всех, кого приручил!” От вас зависит, кем вырастет малыш. В ваших руках его настоящее и будущее. Сейте разумное, доброе, вечное в чистой детской душе, оно обязательно взойдёт. Помогите малышу открыть ещё один мир, ещё одну культуру, ещё один язык — язык вашего земляка и соседа.

**Ҡәҙерле әсәйҙәр, атайҙар, өләсәйҙәр һәм олатайҙар!**

**Хөрмәтле тәрбиәселәр!**

Һеҙҙең ҡулда кескәй балалар өсөн башҡорт теле буйынса ҡулланма. Бала ошо китап менән тел өйрәнеүҙә бигүк еңел булмаған тәүге аҙымдарын яһар. Ҡулланманың ҡыҙыҡлы текстары, сағыу һүрәттәре, һеҙҙең баланы яратыуығыҙ, сабырлығығыҙ тел өйрәнеүҙе мауыҡтырғыс уйынға әүерелдерер һәм башҡорт теленең һөйләшеү нигеҙҙәрен үҙләштереүҙе еңеләйтер.

Һеҙ баланың иң яҡын кешеләре! А. де Сент-Экзюпериҙың “Һин ҡулға эйәләштергән һәр йән эйәһе өсөн һәр саҡ яуаплы!” тигән һүҙҙәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Баланың кем булып үҫеүе тик һеҙҙән генә тора. Уның бөгөнгөһө һәм киләсәге һеҙҙең ҡулда. Баланың саф күңеленә мәңгелек аҡыл һәм изгелек орлоҡтары һалығыҙ, ул орлоҡтар һис шикһеҙ шытып сығыр. Балағыҙға тағы ла бер донъяны, тағы бер мәҙәниәтте асырға, тағы бер телде, һеҙҙең ерҙәшегеҙҙең, күршегеҙҙең телен өйрәнергә ярҙам итегеҙ.

*Автор.*

# МИН ҺӘМ МИНЕҢ ҒАИЛӘМ
# Я И МОЯ СЕМЬЯ



әсәй
мама

апай
сестра



һеңле
сестрёнка



атай
папа



ҡусты
братишка



мин
я



олатай
дедушка



ағай
брат



өләсәй
бабушка

был — это
кем — кто

— Был мин.
— Был кем?
— Был әсәй.
— Был атай.
— Был ҡусты.
— Был апай.
— Былар кем?
— Был беҙ.

— Это я.
— Кто это?
— Это мама.
— Это папа.
— Это братишка.
— Это сестра.
— Кто это?
— Это мы.

беҙ — мы
мин — я

Мин Азат Закиров.
Урал — минең ҡустым.
Ул аҡыллы малай.
Айгөл — минең һеңлем.
Ул матур ҡыҙ.

Я Азат Закиров.
Урал — мой братишка.
Он умный мальчик.
Айгуль — моя сестрёнка.
Она красивая девочка.

мин — минең
я — мой, моя, моё

ҡусты, минең ҡустым
һеңле, минең һеңлем
ҡыҙ, минең ҡыҙым
ул, минең улым

братишка, мой братишка
сестрёнка, моя сестрёнка
дочь, моя дочь
сын, мой сын

ул
он, она, оно это сын

## Беҙ бер ғаилә — Мы одна семья

Мин, әсәй, атай, олатай,
өләсәй, һеңлем Айгөл,
ҡустым Салауат — беҙ ғаилә.
Әсәй, атай, олатай, өләсәй,
мин, һеңлем, ҡустым — беҙ
бер ғаилә.

Я, мама, папа, дедушка,
бабушка, сестрёнка Айгуль,
братишка Салават — семья.
Мама, папа, дедушка,
бабушка, я, сестрёнка,
братишка — мы одна семья.

| |
|---|
| мин — һин — ул<br>я — ты — он, она<br><br>беҙ — һеҙ — улар<br>мы — вы — они |

Ерҙә миңә ни кәрәк?
Атай һәм әсәй кәрәк.
Ерҙә миңә ни кәрәк?
Беҙ йәшәгән өй кәрәк.

Атай әйтә: батырым,
Әсәй әйтә: матурым,
Олатайым: алтыным,
Өләсәйем: яҡыным.

*Р. Шәкүр.*

### Мәҡәлдәр

Ата менән әсә — алтын ҡанат.
Әсә йылыһы — ҡояш йылыһы.
Хандан бала оло, баланан әсә оло.
Алма ағасына, бала атаһына оҡшар.
Туғандарың — ҡулың менән аяғың.
Ағай-эне менән аш тәмле.
Туған бар ерҙә ярҙам бар.

# УЙЫНДАР ҺӘМ УЙЫНСЫҠТАР
# ИГРЫ И ИГРУШКИ



туп
мяч



ҡурсаҡ
кукла



ат
лошадь



айыу балаһы
медвежонок



шар



машина





шаҡмаҡтар
кубики



уҡ
стрела

йәйә
лук



мылтыҡ
ружьё



ҡылыс
сабля



пистолет

| | |
|---|---|
| — Был нимә? | — Что это? |
| — Был уйынсыҡ. | — Это игрушка. |
| — Былар уйынсыҡтар. | — Это игрушки. |
| — Был нимә? | — Что это? |
| — Был туп. | — Это мяч. |
| — Былар нимәләр? | — Что это? |
| — Былар туптар. | — Это мячи. |

| | |
|---|---|
| ҡурсаҡтар | куклы |
| туптар | мячи |
| шарҙар | шары |
| поездар | поезда |
| уйындар | игры |
| уйын | игра |
| уйнай | играет |

| | |
|---|---|
| Малай туп уйнай. | Мальчик играет в мяч. |
| Ҡыҙ ҡурсаҡ уйнай. | Девочка играет с куклой. |
| Малайҙар туп уйнай. | Мальчики играют в мяч. |
| Ҡыҙҙар ҡурсаҡ уйнай. | Девочки играют в куклы. |

| | |
|---|---|
| туп уйыны | игра в мяч |
| йәшенмәк, гөргөлдәк | прятки |
| һәпәләк | жмурки |
| деҥди уйыны | игра в денди |
| компьютер уйындары | компьютерные игры |

## Һанашмаҡтар

— Ҡара ҡуян,
Ҡайҙа бараң?
— Кәмә менән
Тоҙға барам.
— Ҡасан ҡайтаң?
— Яҙ ҡайтам.
Яҙ ҡайтмаһам,
Көҙ ҡайтам.
Һары балсыҡ,
Аҡ балсыҡ,
Балта ал да
Ярға сыҡ!



Аҡ тирәк, күк тирәк,
Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?
— Аҡ тирәк, күк тирәк,
Ләйсән атлы ҡыҙ кәрәк!

Әпкә-бипкә,
Ләмән төпкә,
Ағас, ҡуян, ҡас!
Сәүкә, сыпсыҡ,
Һин ҡал, был сыҡ!

Кәкүк, кәкүк,
Әйт әле,
Кәкүк, кәкүк,
Кил әле.
Бергә уйнайыҡ әле!

**Мәҡәлдәр**

Уйнауын уйна, эшеңде лә уйла.

Уйна ла көл, уҡы ла бел.

Уйын ҡарын туйҙырмаç.

# МИНЕҢ ТӘНЕМ
# МОЁ ТЕЛО

ҡаш
бровь

танау
нос





маңлай
лоб

күҙ
глаз

бит
лицо

сәс
волосы



баш
голова



ауыҙ
рот



керпек
ресница



ирен
губы



ҡолаҡ
ухо

| | | | |
|---|---|---|---|
| тел | язык | тамаҡ | горло |
| йөрәк | сердце | арҡа | спина |
| ашҡаҙан | желудок | бармаҡ | палец |
| үпкә | лёгкие | уң ҡул | правая рука |
| бауыр | печень | һул ҡул | левая рука |




| | |
|---|---|
| баш, башым | голова, моя голова |
| ҡул, ҡулым | рука, моя рука |
| аяҡ, аяғым | нога, моя нога |
| бармаҡ, бармағым | палец, мой палец |
| тел, телем | язык, мой язык |
| ҡолаҡ, ҡолағым | ухо, моё ухо |
| ауыҙ, ауыҙым | рот, мой рот |
| ирен, иренем | губы, мои губы |

## Шиғырҙар

*БЫЛ МИН*

Бына танауым,
Был минең ҡашым,
Күҙем, ҡолағым,
Ә бына башым.
Ауыҙҙы асһам,
Тешем күренә.

Теҙелгән тешем
Өс бөртөк кенә.
Ҡулды күтәрҙем,
Аяҡ тыпырлай.
Үҙенән-үҙе
Бейергә һорай.

*Р. Ураксина.*

Ҡурсаҡтың башы
Иҙәндә ята.
Әлфиә башты
Алып йыуата:
— Хәҙер мин һиңә
Укол яһайым.

Аяҡ-ҡулыңды
Бергә ялғайым.
Күҙ йәшеңде һөрт,
Зинһар, илама!
Быуна — аҡыллы.
Кәнфит һорама.

*Р. Ураҡсина.*

| | |
|---|---|
| баш бармаҡ | большой палец |
| һуҡ бармаҡ | указательный палец |
| урта бармаҡ | средний палец |
| сығанаҡ бармаҡ | безымянный палец |
| сәтәкәй бармаҡ | мизинец |

Был бармағым — атайым,
Был бармағым — әсәйем,
Был бармағым — өләсәй,
Был бармағым — ағайым,
Был бармағым — бәләкәй
Исеме уның —...
(*бала үҙенең исемен әйтә*)

### *БАШ БАРМАҠ*

Мин — баш бармаҡ, баш бармаҡ,
Һәр эште мин башлайым.
Өй эсен дә тиҙ генә
Йыйыштырып ташлайым.

### *ҺУҠ БАРМАҠ*

Мин — һуҡ бармаҡ, һуҡ бармаҡ,
"Һуҡ" тигәнгә — һуҡмайым.
Кескәйҙәрҙе илатҡанды
Туҡмарға ла ҡурҡмайым.

*УРТА БАРМАҠ*

Урта бармаҡ мин үҙем,
Һәр эштә лә мин түҙәм,
Сүп утайым, һыу һибәм,
Керҙәрем ана кибә.

*СЫҒАНАҠ БАРМАҠ*



Сығанаҡ тип аталам,
Сығып китәм туғайға.
Сығып түгел, осоп китәм,
Атланып буҙ турғайға.

*СӘТӘКӘЙ БАРМАҠ*

Минең исемем — сәтәкәй.
Үҙем бигерәк бәләкәй.
Ҡаймаҡ ялап, һөт эсәм,
Ҡасан инде ҙур үҫәм?

**Йомаҡтар**

Бер әсәнән биш бала.
(*Ҡул һәм бармаҡтар.*)

Үҙе һөйәкһеҙ, һөйләгән һүҙе хисапһыҙ.
(*Тел.*)

**Мәҡәлдәр**

Аяҡ ҡайҙа — баш шунда.
Һаҡалға ҡарама, аҡылға ҡара.

# БЕҘҘЕҢ ӨЙ
# НАШ ДОМ



ҡоҙоҡ
колодец



ҡыйыҡ
крыша



күтәрмә (болдор)
крыльцо



тәҙрә
окно



ҡапҡа
ворота



баҫҡыс
лестница



солан
чулан



мунса
баня



өй (йорт)
дом

# ЙОРТ КӘРӘК-ЯРАҠТАРЫ
# ДОМАШНЯЯ УТВАРЬ



юрған
одеяло



пәрҙә (ҡорған)
занавес



мендәр (яҫтыҡ)
подушка



мейес
печь



ултырғыс
стул



өҫтәл
стол

келәм
ковёр





һыуытҡыс
холодильник



саң һурғыс
пылесос



газ плитаһы
газовая плита

| | |
|---|---|
| беҙҙең йорт | наш дом |
| беҙҙең фатир | наша квартира |
| минең бүлмә | моя комната |
| һинең бүлмә | твоя комната |

| | |
|---|---|
| Бүлмә якты. | Комната светлая. |
| Бүлмәм йылы. | Моя комната тёплая. |
| Бүлмәлә карауат, өҫтәл, шкаф тора. | В комнате стоят кровать, стол, шкаф. |
| Был беҙҙең өй. | Это наш дом. |
| Беҙҙең өй матур. | Наш дом красив. |

| | |
|---|---|
| йылы | тепло, тёплый |
| матур | красиво, красивый |
| ята | лежит |
| тора | стоит |
| бар | есть |
| якты — ҡараңғы | светло — темно |
| йылы — һыуыҡ | тепло — холодно |
| матур — йәмһеҙ | красивый — некрасивый |

| | |
|---|---|
| Бынығы зал. | Это зал. |
| Залда шкаф, диван, өҫтәл, кресло, ултырғыстар бар. | В зале есть шкаф, диван, стол, кресло, стулья. |
| Иҙәндә матур келәм ята. | На полу лежит красивый ковёр. |
| Бына кабинет. | Вот кабинет. |
| Кабинетта компьютер, телефон бар. | В кабинете есть компьютер, телефон. |

**Мәҡәлдәр**

Өйөңдөң өй икәнен ҡыш килгәс белерһең.

Хужаһыҙ өй тарҡалыр.

Ҡунаҡта һәйбәт, өйҙә яҡшыраҡ.

Өй тупһанан башлана.



ҡунаҡ бүлмәһе
гостиная



йоҡо бүлмәһе
спальня



бүлмә
комната



аш бүлмәһе
кухня



балалар бүлмәһе
детская



ашхана
столовая



ҡойма
забор



бәләкәй өй
домик



бәҙрәф
туалет



ағас өй (йорт)
деревянный дом



таш йорт (өй)
каменный дом



ҙур йорт (өй)
большой дом

2 — 1717



Научная библиотека УНЦ РАН





## Йомаҡтар

Өй башында оҙон ағай.
(*Мөрйә.*)

Киртләс-киртләс кәбән ҡойҙом.
(*Өй.*)

2 баш, 1 кәүҙә, 4 аяҡ.
(*Карауат.*)

Ел үтмәй, күҙ үтә.
(*Тәҙрә.*)

## Теләктәр

Өйөгөҙ ҡотло булһын.

Өйөгөҙ — яҡты, һүҙегеҙ — татлы, үҙегеҙ яҡшы булығыҙ!

## Шиғырҙар

Ҙур ҡумтала балҡып тора
Зәңгәр генә быяла.
Телевизор, телевизор,
Әлдә һин бар донъяла.
*З. Ханнанова.*

Урамда буран,
Мин өйҙә торам,
Тәҙрә аша
Тик ауыҙ йырам.
*Ғ. Тукай.*

Бына тора беҙҙең өй.
Тартынмайса инегеҙ!
Эшсән йомарт атайымды,
Йомшаҡ ҡуллы әсәйемде
Бөтәгеҙ ҙә күрегеҙ!
*М. Ғәли.*

# ҺАУЫТ-ҺАБА
# ПОСУДА



сеүәтә
миска

таба
сковорода





сәйнүк
чайник

силәк (күнәк, биҙрә)
ведро







ижау (сүмес)
ковш

таҫтамал
полотенце

суйын (сөгөн)
чугун





табаҡ
чаша

2*


самауыр
самовар
тәрилкә
тарелка
майлыҡ
салфетка
сынаяҡ
чашка
бысаҡ
нож
сынаяҡ аҫты
блюдце
калаҡ (ҡашыҡ)
ложка
сәнске
вилка
ашъяулыҡ
скатерть
иләк
сито
сүмес
половник
кәстрүл
кастрюля

| | | | |
|---|---|---|---|
| ашай | ест | һөртә | вытирает |
| йыуа | моет | ялай | облизывает |
| ҡырҡа | режет | ҡайната | кипятит |
| һала | кладёт | бөтә | кончается |
| ҡоя | наливает | | |

## Шиғырҙар



Уйын бөттө, балалар,
Ҡайнаны самауырҙар.
Гөж-гөж самауыр,
Һине ҡайнатыу ауыр.
Ҡалаҡ ҡатыҡ ашата.
Ҡаймаҡ ҡалаҡ ялата.
Ҡулыбыҙҙа сеүәтә,
Бөтәбеҙ таҡмаҡ әйтә.

*Р. Ураҡсина.*

Кәрзин, кәрзин, кәрзинкә,
Әйҙә, киттек еләккә!
Кәрзиндәрем семәрле,
Минең ҡулдар егәрле.

*Ф. Ноғоманова.*

## Мәҡәл һәм әйтем

Ашына күрә табағы, балына күрә ҡалағы.
Ашаған табағыңа төкөрмә.

## Йомаҡтар

Бәләкәй генә аҡ тана, мөгөҙөм бар,тип маҡтана.
(*Сәйнүк.*)

Ҡаҙанында һыу ҡайнай, уртаһында ут яна.
(*Самауыр.*)

# АШ-ҺЫУ
# ПИЩА



икмәк
хлеб




май
масло



ҡалас
калач



ит
мясо




сәй
чай



балыҡ
рыба



йомортҡа
яйцо




һут
сок



шәкәр
сахар




һөт
молоко



туңдырма
мороженое




ҡаймаҡ
сметана



билмән
пельмени



аш
суп



һурпа
бульон

| | |
|---|---|
| Был бал. | Это мёд. |
| Бал татлы. | Мёд сладкий. |
| Был тоҙ. | Это соль. |
| Тоҙ аҡ. | Соль белая. |
| Икмәк йомшаҡ. | Хлеб мягкий. |

| | |
|---|---|
| һалма (туҡмас) | лапша |
| ҡамыр | тесто |
| һурпа | бульон |
| аш | суп |
| ашау | есть |
| эсеү | пить |
| сәй эсеү | пить чай |
| бешереү | варить |
| аш бешереү | варить суп |
| ҡыҙҙырыу | жарить |
| картуф ҡыҙҙырыу | жарить картофель |
| ҡайнатыу | кипятить |
| әҙерләү | готовить |
| иртәнге аш | завтрак |
| төшкө аш | обед |
| киске аш | ужин |
| байрам ашы | праздничная еда |
| башҡорт кухняһы | башкирская кухня |
| милли аштар | национальные блюда |

# БАШҠОРТ АШТАРЫ – БАШКИРСКИЕ БЛЮДА



тултырма
колбаса



ҡаҙы
казы



ҡаҡланған ит
вяленое мясо



бәлеш
пирог



өләш
улюш



ҡоймаҡ
блины



бауырһаҡ
баурсак



сәксәк
чак-чак



көлсә
лепёшка



ҡаҡ
пастила




буҙа
буза




ҡымыҙ
кумыс




ҡатыҡ
катык



ҡыҙыл эремсек
красный творог



ҡорот
курут



һурпа
бульон

## Шиғырҙар

Тыуған көнөмдә
Бешерҙек ҡалас.
Бөтәбеҙ туйҙы,
Бесәйебеҙ ас.

Май бештек,
Ҡалды айран,
Тәмле инде
Ул, хайран.
Ҡамыр баҫам айранға,
Күмәс булыр байрамға.

Бешерҙек беҙ тултырма,
Ҡуҡырайып ултырма,
Үрелә һал тиҙ генә,
Ашап ал етеҙ генә!

*Р. Ураксина.*

## Теләктәр

Аштарығыҙ тәмле булһын!
Ауыҙыңа бал да май!
Өҫтәлегеҙ тулы булһын!

## Йомаҡтар

Бер сынаяҡ эсендә
ике төрлө һөт тора.
*(Йомортҡа.)*



Башы бар — сәсе юҡ,
күҙе бар — ҡашы юҡ.
*(Балыҡ.)*



Үҙе йәнһеҙ,
унһыҙ донъя һанһыҙ.
*(Икмәк.)*



Яңғыҙ ғына ашалмай,
унан башҡа аш бармай.
*(Тоҙ.)*



Ҡар түгел — аҡ,
боҙ түгел — ҡаты,
тоҙ түгел — ирей.
*(Шәкәр.)*



## *Мәҡәлдәр*

Икмәгең-тоҙоң — яҡты йөҙөң.
Май бутҡаны боҙмаҫ.
Һыйлағанда һыу булһа ла эс.

# ӨҪ-БАШ ҺӘМ АЯҠ КЕЙЕМДӘРЕ
# ОДЕЖДА И ОБУВЬ

## БАШ КЕЙЕМДӘРЕ — ГОЛОВНЫЕ УБОРЫ



бүрек
шапка



эшләпә
шляпа



берет



фуражка



кепка



түбәтәй
тюбетейка



шәл
шаль



вәл
платок-паутинка



яулыҡ
платок

# ӨҪ КЕЙЕМДӘРЕ — ВЕРХНЯЯ ОДЕЖДА



блузка



салбар
брюки



халат



кофта



костюм



пальто



бирсәткә
перчатки



пинжәк
пиджак



күлдәк
платье



тун
шуба



свитер



бейәләй
варежки

# АЯҠ КЕЙЕМДӘРЕ — ОБУВЬ



быйма
валенки



калуш
галоши



итек
сапоги



ботинка
ботинки



кроссовка
кроссовки



кеды



сандалый
сандалии



тапочка
тапочки



туфли

| | |
|---|---|
| төймә таға | пришивает пуговицу |
| таҫма бәйләй | повязывает ленту |
| күлдәк кейә | надевает платье |
| колготка йыуа | стирает колготки |
| майка кейә | надевает майку |

Әсәйем тун һайлай.
Мин бүрек ҡарайым.
Өләсәйем калуш кейә.

Мама выбирает шубу.
Я примеряю шапку.
Бабушка надевает галоши.

# МИЛЛИ КЕЙЕМ — НАЦИОНАЛЬНАЯ ОДЕЖДА



| | |
|---|---|
| елән | зилян |
| итәкле күлдәк | платье с оборками |
| ҡушъяулыҡ | платок-покрывало |
| теүәтәй | тюбетейка |
| ыштан | штаны |
| алъяпҡыс | передник |
| толоп | тулуп |
| ҡама тун | шуба из выдры |
| төлкө бүрек | лисья шапка |
| кәзәкей | казакин |
| камзул | камзол |
| ситек | ичиги |
| сарыҡ | чарык |
| ҡата | кожаные башмаки |

| | |
|---|---|
| түшелдерек | нагрудник |
| яға, селтәр, һаҡал | нагрудник из кораллов и монет |
| ҡашмау | головной убор, украшенный кораллами и монетами |

## Шиғырҙар

*ИТЕГЕМ БЕЙЕЙ БЕЛМӘЙ*



Әнисә бейеп йөрөй,
Итек кейеп аяҡҡа.
Бер ҙә көйгә баҫа алмай,
Ул яҡҡа ла, был яҡҡа.
Тыпыр-тыпыр тыпырлай,
Семтеп тотоп итәген:
— Үҙем бейей беләмен дә,
Бейей белмәй итегем.

*Р. Ураҡсина.*

*ҮҪКӘНМЕН*

Атай баҫһа, салбарының
Кеҫәһенә еткәнмен.
Ә ултырһа, костюмының
Кеҫәһенән үткәнмен —
Бына шулай үҫкәнмен!
Вәт! *Р. Ураҡсина.*

## Мәҡәлдәр

Ағас күрке — япраҡ, әҙәм күрке — сепрәк.

Кейеменә ҡарап ҡаршы алалар,
аҡылына ҡарап оҙаталар.

Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.

Ҡараҡтың бүрке яна.

# ЙОРТ ХАЙУАНДАРЫ
# ДОМАШНИЕ ЖИВОТНЫЕ



һыйыр
корова



үгеҙ
бык



быҙау
телёнок



кәзә
коза



ат
лошадь



ҡолон
жеребёнок



кәзә бәрәсе
козлёнок



һарыҡ
овца



һарыҡ бәрәсе
ягнёнок



суҡа балаһы
поросёнок



суҡа
свинья



бесәй
балаһы
котёнок



бесәй
кошка



көсөк
щенок



эт
собака

| | |
|---|---|
| Һыйыр мөңрәй. | Корова мычит. |
| Бесәй мыяулай. | Кошка мяукает. |
| Эт өрә. | Собака лает. |
| Һыйыр һөт бирә. | Корова даёт молоко. |
| Һарыҡ йөн бирә. | Овца даёт шерсть. |
| Кәзә мамыҡ бирә. | Коза даёт пух. |
| Эт өй һаҡлай. | Собака сторожит дом. |
| Бесәй һөт эсә. | Кошка пьёт молоко. |
| Ат йөк ташый. | Лошадь возит груз. |
| Ат саба. | Лошадь скачет. |
| Көсөк уйнай. | Щенок играет. |

## Шиғырҙар

### *АТ*

Атым сапты, ах, сапты,
Бөтә халыҡ шаҡ ҡатты.
Елдерә, тип, был ҡалай,
Һөйләшә малай-шалай.

*М. Ғәли.*





ЭТ

Минеӊ этем бик иркә,
Үҙе тора бик иртә.
Сит кешене индермәй,
Өйгә яҡын килтермәй.
*“Йәншишмә” гәзитенән.*



БЕСӘЙ

Бесәй, бесәй, бесәй шул,
Бесәй әле кескәй шул.
Үҙе мырлай ҙа мырлай,
Әллә ул шулай йырлай?
*Ҡ. Даян.*

**Көләмәстәр**

Айнур:
— Атай, өләсәйҙәргә ҡунаҡҡа барайыҡ.
Атаһы:
— Улым, мотоциклдыӊ бензины юҡ. Йөрөмәй.
Айнур:
— Ат менән барайыҡ, атҡа бензин кәрәкмәй бит.

Рәсиләгә алты йәш.
Апаһы Рәсиләнән һорай:
— Йә, Рәсилә, йорт хайуандарын һанап сыҡ әле.
— Һыйыр.
— Тағы.
— Һарыҡ, кәзә...
— Тағы.
— Кеше.

## Йомаҡтар



Һаҡалы бар — бабай түгел,
Бер кемгә лә ағай түгел,
Тәү ҡарашҡа меҫкен, өтөк,
Үсектерһәң, китә төкөп.
(*Кәзә.*)



Ниндәй аусы ҡоралһыҙ
Йәнлек аулай төн буйы,
Унан мыйығын һелкетеп,
Йоҡлап ята көн буйы.
(*Бесәй.*)

## Тиҙәйткес

Мейес башында биш бесәй,
Биш бесәйҙең биш башы.
Биш бесәйҙең биш башына
Емерелмәһен мейес башы.

## Мәҡәлдәр

Эт — эткә, эт — ҡойроҡҡа.

Ат — тешенән, егет эшенән билдәле.

# ҠЫРАҒАЙ ХАЙУАНДАР
# ДИКИЕ ЖИВОТНЫЕ



бүре
волк



айыу
медведь



ҡуян
заяц



төлкө
лиса



маймыл
обезьяна



фил
слон



арыҫлан
лев



зебра



юлбарыҫ
тигр



болан
олень



тейен
белка



сыҫкан
мышь



терпе
ёж



мышы
лось



һеләүһен
рысь

жираф

| | |
|---|---|
| бала айыу | медвежонок |
| бала ҡуян | зайчонок |
| бүре балаһы | волчонок |
| төлкө балаһы | лисёнок |

| | |
|---|---|
| Айыу, бүре ҡайҙа йәшәй? | Где живут медведь и волк? |
| Фил ҡайҙа йәшәй? | Где живёт слон? |
| Төлкө нимә ашай? | Что ест лиса? |
| Тейен нимә ашай? | Чем питается белка? |
| Ҡуян нимәнән ҡурка? | Кого боится заяц? |
| Бүре тураһында нәмә беләһең? | Что знаешь о волке? |
| Сыҫкандың дошманы нимә? | Кто враг мышей? |

## Шиғырҙар

Танышайыҡ: мин — ҡуян,
Урман эсендә оям.
Бары тик оямда ғына
Үҙемде батыр тоям.

*Г.Юнысова.*

Өй артында бүре бар,
Йылтыраған күҙе бар.

*А.Йәғәфәрова.*

## Йомаҡтар



Баҙҙа йәшәй,
дошманы — бесәй.
(*Сысҡан.*)



Ана бара хан,
ауыҙы-мороно ҡан.
(*Бүре.*)

Йәйен һоро, ҡышын аҡ,
ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ.
(*Ҡуян.*)





Оҙон йөнтәҫ ҡойроғон
Күрһәң дә килә көлкө.
Был йәнлекте мин беләмен,
Исеме уның . . .

(*Төлкө.*)

## *АЙЫУ-БҮРЕ ЮҠ ИКӘН*
(уйын)

Балалар “айыу” һайлай. Уға “өң” һыҙалар. 20 метрҙа балаларҙың “өйө” һыҙыла.

Балалар “өйҙән” сығып, айыу яғына еләккә китәләр. Айыу “өңөнән” сыға ла йәшенә.

Балалар еләк йыя-йыя йырлайҙар:

*Еләк йыям, ҡаҡ ҡоям*
*Әсәйемә бүләккә.*
*Бында еләк күп икән,*
*Айыу-бүре юҡ икән.*

Шул ваҡытта айыу килеп сығып, балаларҙы баҫтыра башлай. Улар “өйгә” ҡаса.

Тотолған бала “айыу” була. Уйын яңынан башлана.

*И. Ғәләүетдинов.*

### Мәҡәлдәр

Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар.
Бер тинлек ҡуян, ун тинлек зыян.
Сысҡанға үлем, бесәйгә көлкө.

# ЙОРТ ҠОШТАРЫ
# ДОМАШНИЕ ПТИЦЫ



ҡаҙ
гусь



тауыҡ
курица



өйрәк
утка



тауыҡ себеше
цыплёнок



әтәс
петух



күркә
индюк

**Ҡош-ҡорт**

Йорт ҡоштары: ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ.
Күркә лә йорт ҡошо.

Ҡош ите тәмле була.

**Птицы**

Домашние птицы: гусь, утка, курица.
Индюк тоже домашняя птица.
Мясо птицы вкусное.

## Шиғырҙар

— Ҡыт-ҡыт-ҡыт, —
Дуҫын саҡыра тауыҡ, —
— Ҡыт-ҡыт-ҡыт,
Етте уйнарға ваҡыт.

*Ф. Юлдашбаева.*

Яңы ҡар өҫтөнән
Ҡаҙҙар лап-лап үттеләр.
Ҡыҙыл тәпәйҙәре менән
Йондоҙ яһап киттеләр.

*С. Муллабаев.*

## Йомаҡтар

Тибенә лә суҡына,
тамағы туймай —
йәне тынмай.

(*Тауыҡ.*)

Башы тараҡ,
ҡойроғо ураҡ.

(*Әтәс.*)

## Һанашмаҡ

Ҡыш китте, яҙ килде,
Өйрәк менән ҡаҙ килде,
Тау баштары асылды,
Аҡ таштары сәселде.
Һайрайҙар турғайҙар,
Шалтырай һуҡа-һабандар,
Моңая сыйырсыҡ,
Йыр һалды сыпсыҡ.
Һин тор, был сыҡ!

## Көләмәстәр

Апаһы ҡустыһынан:
— Һин ниндәй йорт ҡоштарын беләһең? — тип һораған.
— Өйрәк, тауыҡ, һыйыр, кәзә, ата ҡаҙ менән һарыҡ, — тип яуап биргән ҡустыһы.

Әсәһе менән өләсәһе ҡаҙ йолҡа. Дүрт йәшлек Самат:
— Әсәй, ҡаҙ утайһығыҙмы? — тип һорай.

## Мәҡәлдәр

Һуҡыр тауыҡҡа бары ла бойҙай.

Өйрәк биреп, ҡаҙ алыу.

# ҠОШТАР
# ПТИЦЫ



күгәрсен
голубь



ҡарлуғас
ласточка



сыйырсыҡ
скворец



бөркөт
орёл



ҡарға
ворона



кәкүк
кукушка



турғай
воробей



ҡыҙылтүш
снегирь



тутыйғош
попугай



һандуғас
соловей



өкө
сова



торна
журавль



ҡауҙы
аист



аҡҡош
лебедь



һайыҫҡан
сорока

| | |
|---|---|
| ҡоштар һайрай | птицы поют |
| ҡоштар оса | птицы летают |
| ситлектә йәшәй | живёт в клетке |
| аҡҡош ҡанаты | крыло лебедя |
| сыйырсыҡ ояһы | гнездо скворца |

Күгәрсен ҡайҙа йәшәй?
Сыйырсыҡтар ҡасан килә?
Ниндәй ҡоштар беҙҙә ҡышлай?

Где живёт голубь?
Когда прилетают скворцы?
Какие птицы у нас зимуют?

## Шиғырҙар

“Яҙ килә лә яҙ килә”, — тип
Йырлашалар турғайҙар,
Ағастар япраҡ ярғанды
Һис тә көтөп тормайҙар.

*Г. Якупова.*

Сут та сут килеп
Ҡоштар һайраша.
Йырлар саҡтары —
Әле яҙ башы.

*М. Хисмәтуллина.*

## Мәҡәлдәр

Ҡаҙ килһә, яҙ килә.

Илдә сыпсыҡ үлмәй.

Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта.

Һауалағы торнаға ышанып,
ҡулыңдағы турғайҙы ысҡындырма.



## Йомаҡтар

Яҙын йырлап киләләр,
Беҙҙе моңға күмәләр,
Көҙөн тағы күмәкләшеп
Йылы яҡҡа китәләр.

(*Ҡоштар.*)

Көндөҙ — өнһөҙ,
ухылдамай төнһөҙ.

(*Өкө.*)

# БАЛЫҠТАР
# РЫБЫ



алабуға
окунь



суртан
щука



ташбаш
пескарь



шамбы
налим



сабаҡ
плотва



ҡыҙылбалыҡ
таймень



ҡорбан (ҡорман)
лещ



йәйен
сом

| | |
|---|---|
| ыуылдырыҡ | икра |
| аквариум балығы | аквариумная рыба |
| балыҡ тотоу | рыбалка (рыбачить) |
| балыҡсы | рыбак |
| балыҡ һурпаһы | уха |

| | |
|---|---|
| ҡармаҡ | удочка |
| балыҡ ҡанаты | плавник |

| | |
|---|---|
| Балыҡ яҡшы сиртә. | Рыба хорошо клюёт. |
| Малайҙар балыҡ тота. | Мальчики рыбачат. |
| Улар алабуға, ташбаш тотҡан. | Они поймали окуня и пескаря. |
| Йылғала суртан бар. | В реке есть щука. |
| Мин ҡыҙылбалыҡ ашаным. | Я ел тайменя. |

## Мәҡәлдәр

Балыҡ башынан серей.
Бер үк балыҡ башын сәйнәү.
Ҡасҡан балыҡ ҙур була.

## Йомаҡтар

Һыуҙа тыуа, ерҙә үлә.
(*Балыҡ.*)

Аяғы юҡ — йөрөй.
(*Балыҡ.*)

## Һынамыштар

Балыҡтар уйнаһа, ямғыр яуа.
Балан сәскә атҡанда, балыҡ сиртә.
Ылыу (аждаһа) йылы яуын була.

## Көләмәстәр

Апаһы Азаттан:
— Ни өсөн балыҡтар бер тауыш та сығармайҙар, һөйләшмәйҙәр? — тип һорай.
— Сөнки уларҙың ауыҙҙарына һыу керә, — тип яуап бирә Азат.

## Шиғыр

Ҡармаҡлап күп балыҡ тоттом,
Их, беҙҙең Туҡ балығы!
Алтын тараҡ ҡаҙағандар,
Көмөш тәңкә ҡабығы.
Балыҡтарҙы тотоп ҡарай
Ҡустым Хәй ҙә, әсәй ҙә.
Ут күҙҙәрен ялтыратып,
Килде янға бесәй ҙә.
— Мыяу-мыяу! — ти ул миңә,
Гүйә һорай береһен.
Ни арала эләктергән
Сабаҡтың иң эреһен.
— Бесәй балыҡ тотҡан, — ти Хәй,
Янай уға бармағын.
— Бесәйҙең дә тәпәйендә
Бар икән, — ти, — ҡармағы!

*С. Муллабаев.*



# БӨЖӘКТӘР
# НАСЕКОМЫЕ



бал ҡорто
пчела



себен
муха



күбәләк
бабочка



серәкәй
комар



сиңерткә
кузнечик



ҡырмыҫҡа
муравей



ҡуңыҙ
жук



үрмәксе
паук

| | |
|---|---|
| серәкәй безелдәй | комар жужжит |
| себен оса | муха летает |
| бал ҡорто саға | пчела жалит |
| күбәләктәр оса | бабочки летают |
| ҡырмыҫҡа ояһы | муравейник |

## Шиғырҙар

Әйт әле, күбәләк,
Һөйләшәйек бергәләп,
Был тиклем күп осоп,
Арымайһың һин нисек?

*Ғ. Тукай.*

Аҡ та була, күк тә була,
Төрлө була күбәләк.
Сәскә осҡан кеүек була,
Улар осһа бергәләп.

*Ҡ. Даян.*

Вил ҡара ҡуңыҙ тапҡан,
Шырпы ҡабына япҡан.
Ҡумтала уға тығыҙ,
Эх, илай бахыр ҡуңыҙ.

*Б. Байым.*

## Йомаҡтар

Ҡараңғы өй эсендә
Нескә билдәр гөжләйҙәр,
Епһеҙ ҙә, энәһеҙ ҙә
Улар селтәр бәйләйҙәр.

(*Бал ҡорттары.*)



Үҙенән ҙур йөк күтәргән,
Булһа ла бик кескенә.
Эш эшләргә яратҡанға,
Тынып тормай һис кенә.
Күнеккән тик тормаҫҡа,
Ул егәрле . . .

(*Ҡырмыҫҡа.*)

Мөгөҙө бар — үгеҙ түгел,
Ҡарға түгел, ҡап-ҡара.
Осһа “жу-жу” килеп оса,
Төшһә, тиреҫ аҡтара.

(*Ҡуңыҙ.*)



## Һынамыштар

Ҡырмыҫҡа ҡанатланһа, ямғыр булыр.
Себен-серәкәй ҡайнашһа, ямғыр яуыр.

4—1717

# ЕМЕШ-ЕЛӘК
# ФРУКТЫ И ЯГОДЫ



алма
яблоко



сейә
вишня



ҡарағат
смородина



миләш
рябина



ер еләге
клубника



балан
калина



крыжовник



ҡурай еләге
малина



муйыл
черёмуха

| | |
|---|---|
| слива | слива |
| лимон | лимон |
| әфлисун | апельсин |
| һырғанаҡ | облепиха |
| өрөк | абрикос |
| йөҙөм | виноград |
| ҡыҙыл бөрлөгән | костяника |
| ҡара бөрлөгән | ежевика |
| армыт | груша |
| ҡайын еләге | земляника |
| ҡурай еләге | малина |
| ер еләге | клубника |
| көртмәле | черника |
| мүк еләге | клюква |
| әлморон | шиповник |
| бешкән еләк | спелая ягода |
| эре алма | крупное яблоко |

| | |
|---|---|
| Муйыл сәскә атҡан. | Расцвела черёмуха. |
| Көҙ еләк-емеш үҫемлектәре ултырталар. | Осенью сажают плодовые растения. |
| Сейә, ҡарағат бешә. | Поспевают вишня, смородина. |
| Беҙҙең баҡсала алма, сейә, муйыл, балан үҫә. | В нашем саду растёт: яблоня, вишня, черёмуха, калина. |
| Өрөк беҙҙә үҫмәй. | Абрикос у нас не растёт. |
| Мин алма ҡайнатмаһын яратам. | Я люблю яблочное варенье. |
| Әсәйем сейә компоты эшләй. | Мама варит вишнёвый компот. |
| Беҙ ҡайын еләге йыябыҙ. | Мы собираем землянику. |

## Шиғырҙар



*БӨРЛӨГӘН*

Япраҡ аҫтына
Боҫкан бөрлөгән.
Ҡайһы арала
Бешеп өлгөргән.

*М. Хисамова.*

*ӘЛМОРОН*

Ниндәй матур әлморон,
Әлморон үҫкән урын.
Сәскәләре ал ғына.
Ҡояш һирпкән бал ғына.
Шундай матур әлморон —
Тыуған ерҙең ҡото ул,
Тупрағыбыҙ һуты ул.

*М. Хисамова.*



## Мәҡәлдәр

Алма ағасынан алыҫ төшмәй.

Алма, беш — ауыҙыма төш.

## Йомаҡтар



Ҡыҙыл төймәһен аҫҡан,
ҡаршыма килеп баҫҡан.
(*Миләш.*)



Ҡыҙыл төймә таптым,
ауыҙыма ҡаптым.
(*Еләк.*)



Түңәрәге шарҙай,
төҫө ҡандай, тәме балдай.
(Сейә.)

## Көләмәс

Ләйсән урамдан ҡайтып инде лә:
— Өләсәй, һин ер еләге яратаһыңмы?— тип һораны.
— Яратам, тик һеҙ ҡайын еләге йыйғанһығыҙ.
— Ни эшләп ҡайын еләге булһын? Беҙ уны ерҙән йыйҙыҡ.

# ЙӘШЕЛСӘЛӘР
# ОВОЩИ









кишер
морковь

кәбеҫтә
капуста

картуф
картофель







һуған
лук

ҡыяр
огурец

шалҡан
репа





сөгөлдөр
свёкла

һарымһаҡ
чеснок

ҡарбуз
арбуз







помидор

ҡауын
дыня

ҡабаҡ
тыква

| | |
|---|---|
| түтәл | грядка |
| баҙар | рынок |
| ҡараҫҡы | пугало |
| кәртә | ограда |
| йәшелсә баҡсаһы | огород |
| ямғыр | дождь |
| һыу һибеү | поливать |
| йәшелсә үҫтереү | выращивать овощи |
| уңыш йыйыу | собирать урожай |
| ҡыяр тоҙлау | солить огурцы |
| әсе һуған | горький лук |
| һары шалҡан | жёлтая репа |
| ҡыҙыл сөгөлдөр | красная свёкла |

## Шиғырҙар

*ВИТАМИН*

Әсәй бирҙе помидор
Үҙе бешкән, үҙе ҙур.
— Ашағыҙ, — ти,— балалар,
Уның витамины бар.
Ике ҡыҙыл помидор
Ашағас та Маһинур:
— Ҡайҙа витамины, — ти.
— Ашаманым бит уны.

*ҺУҒАН*

Ашҡа һуған турағанда
Йәш тығылды күҙемә,
—Күҙгә һуған керҙе, — тиеп
Һөйләнәм үҙ-үҙемә.
Минең һүҙгә ғәжәпләнеп,
Янға килде туғаным:
— Күрәләтә алдаша, — ти,
— Ҡулыңда бит һуғаның.

*С. Муллабаев*

## Һынамыштар

Һуған ҡабығы ҡалын булһа, ҡыш һыуыҡ була.

Майҙың ун туғыҙында ҡыяр ултырт.

Борсаҡ уңһа, һуңынан өс йыл уңмаҫ.

## Йомаҡтар

Ер аҫтында алтын ҡаҙыҡ.
(*Кишер.*)

Бәләкәй генә йорт, эсе тулы ҡорт.
(*Ҡыяр.*)

Үҙем тунайым, үҙем илайым да илайым.
(*Һуған.*)

## Көләмәстәр

Беренсе синыфта математика дәресе бара.
Уҡытыусы уҡыусыларҙан:
— Биш ҡыярға өс помидорҙы ҡушһаң, нисә була?
Гөлфиә:
— Салат була.

Апаһы һеңлеһенән һорай:
— Әминә, бөгөн әсәйгә булыштыңмы?
— Булыштым. Әсәй һуған әрсене, ә мин илап торҙом,— ти һеңлеһе.

## Мәҡәлдәр

Картуфың — ярты икмәгең.
Ике ҡарбуз бер ҡултыҡҡа һыймаҫ.

# АҒАСТАР
# ДЕРЕВЬЯ



ҡайын
берёза



шыршы
ель



тал
ива



йүкә
липа



тирәк
тополь



уҫаҡ
осина



ҡарағай
сосна



миләш
рябина



балан
калина



имән
дуб



саған
клён



муйыл
черёмуха

| | |
|---|---|
| урман | лес |
| ағас | дерево |
| ҡыуаҡ | кустарник |
| олон | ствол |
| япраҡ | лист |
| ботаҡ | ветка |
| тамыр | корень |
| сәтләүек | орех |
| ағас төбө | пень |

| | |
|---|---|
| Урманда ҡайын, шыршы үҫә. | В лесу растут берёза, ель. |
| Урманда ағастар шаулай. | В лесу шумят деревья. |
| Балалар шыршы биҙәй. | Дети украшают ёлку. |
| Бына имән. | Вот дуб. |
| Йүкә сәскә ата. | Цветёт липа. |
| Көҙ япраҡтар һарғая. | Осенью листья желтеют. |

## Шиғырҙар

Ауылымды уратып
Алған төрлө ағастар:
Имән, ерек, сағандар,
Ҡайындар, ҡарағайҙар.

*“Йәншишмә” гәзитенән.*

*САҒАН*

Ҡыҙғылт һары япраҡтарын
Ергә ҡоя аҡ саған,
Ҡаҙҙың ҡыҙыл тәпәйенә
Улар бигерәк оҡшаған.

*С. Муллабаев.*



## Йомаҡтар

Бөтә ағайҙар тундарын һалған,
береһе генә сисмәй ҡалған.
(*Шыршы.*)





Яҙ килһә — кейенә,
көҙ килһә — сисенә.
(*Ағас.*)



Көҙ етһә, йөнөн ҡоя,
яҙ етһә, йәшәрә.
(*Ағас.*)

## Мәҡәлдәр

Ағас тамырына ҡарап үҫә.
Яңғыҙ ҡайынға ҡош ҡунмаҫ.
Йомшаҡ ағасты ҡорт ашай.

# СӘСКӘЛӘР ҺӘМ ҮЛӘНДӘР
# ЦВЕТЫ И ТРАВЫ



умырзая
подснежник



ҡурай
курай



миләүшә
фиалка



һары мәтрүшкә
зверобой



мәтрүшкә
душица



бәпембә
одуванчик



ҡәнәфер
гвоздика



күгәрсен күҙе
незабудка



ләлә
тюльпан

| | |
|---|---|
| гөлләмә | букет |
| сәскә үҫтереү | выращивать цветы |
| аҡ сәскә | ромашка |
| ҡыҙыл роза | красная роза |
| зәңгәр сәскә | василёк |
| ҡыңғырау сәскә | колокольчик |
| ынйы сәскә | ландыш |
| һабын сәскә | зорька |
| ут сәскә | лютик |
| дарыу үләндәре | лекарственные травы |
| мәтрүшкә сәскәһе | цветы душицы |
| йыуа | дикий лук |
| сөйәл үләне | чистотел |
| ҡаҙ үләне | гусиные лапки |
| кейәү үләне | чабрец |

| | |
|---|---|
| Һеҙ сәскә яратаһығыҙмы? | Вы любите цветы? |
| Ниндәй сәскәләр үҫтерәһегеҙ? | Какие цветы выращиваете? |
| Ниндәй үләндәр беләһегеҙ? | Какие травы вы знаете? |
| Беҙҙә ниндәй дарыу үләндәре үҫә? | Какие лекарственные травы растут у нас? |


астра


юл япрағы
подорожник


ҡуҙғалаҡ
щавель


аҡ сәскә
ромашка

Кесерткән, әрем, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә — бик файҙалы үләндәр. Үләндәрҙе май-июнь айҙарында киптерәләр.

Крапива, полынь, душица, зверобой — очень полезные травы. Травы сушат в мае-июне.

## Шиғырҙар

*ҠУҘҒАЛАҠ*

Беҙ йыябыҙ ҡуҙғалаҡ,
Сүгәләп тә юрғалап.

*ЙЫУА*

Беҙ йыябыҙ йыуалар,
Бармаҡ кеүек йыуандар.

*ҺАРЫ МӘТРҮШКӘ*

Ҡояш сәскәһе —
Һары мәтрүшкә.
Төҫлө балаҫтай
Туғай — кәрешкә.

*Р. Ураҡсина.*

*ӘРЕМ*

Баш аҫтына һалып ятһаң
Еҫе әсе әремде,
Йоҡоң тыныс булыр, тиҙәр,
Еңеләйтер тәнеңде.

*М. Хисамова.*



## *БӘПЕМБӘ*

Бәпембә, бөгәрлән,
Бәпембә, бөгәрлән,
Тәгәрмәскә һин әйлән.
Бәпем, бәпем, бәпембә,
Тигеҙ тәгәрмәс үрә.

*Р. Ураксина.*

Бәпембә юл буйында
Ҡояш төҫлө ултыра.
Башындағы ҡалпағы
Янырға ғына тора.

*С. Муллабаев.*



## Йомаҡтар

Ут түгел, үҙе яндыра.
(*Кесерткән.*)

Һыу өҫтөндә һары май.
(*Томбойоҡ.*)

Олоһо ла, кесеһе лә
эшләпә кейгән.
(*Бәшмәк.*)

## Мәҡәлдәр

Шайтан таяғына ҡырау теймәҫ.

Андыҙ барҙа ат үлмәҫ.

## Көләмәстәр

Бәләкәй Самат уйнап ултырғанда, апаһы уға йыуа биргән. Ул йыуаны ала ла, диванда йоҡлап ятҡан атаһы эргәһенә килеп:
— Атай, тор, бесән аша, — ти.

— Улым, был — кеше ашай торған бәшмәк.
— Атай, ҡайтайыҡ тиҙерәк, йә беҙҙе ашап ҡуйыр,— тип, илай башлаған улы.

## Һамаҡтар

Йыуа, йыуа, йыуа тап,
Йыуа тапһаң, өҙөп ҡап.

Яңы ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ,ҡаҡы, балтырған, емеш-еләк ашар алдынан әйтәләр:

— *Иҫке ауыҙ, яңы аш, зәңге сире, минән ҡас!*
— *Иҫке ҡорһаҡ, яңы аш, яман ауырыу, минән ҡас!*
— *Иҫке ауыҙ, яңы аш, яңынан бир йөҙ йәш!*

# БӨРТӨКЛӨ КУЛЬТУРАЛАР
# ЗЕРНОВЫЕ КУЛЬТУРЫ



бойҙай
пшеница



арыш
рожь



арпа
ячмень



һоло
овёс



тары
просо



кукуруз
кукуруза



ҡарабойҙай
гречиха



дөгө
рис



борсаҡ
горох

5—1717

| | |
|---|---|
| иген (ашлыҡ) | зерно |
| башаҡ | колос |
| ужым | озимые |
| сәкән | початок |
| иген баҫыуы | хлебное поле |
| арыш икмәге | ржаной хлеб |
| борсаҡ ашы | гороховый суп |
| һоло ярмаһы | овсяная крупа |
| тары бутҡаһы | пшённая каша |
| арпа бутҡаһы | ячневая каша |
| кукуруз үҫтереү | выращивать кукурузу |

## Шиғырҙар

*НИМӘ – УЛ ИКМӘК?*

Икмәк ул беҙҙә
Бөтәһенә баш.
Ул – беҙгә һауа,
Ул – беҙгә ҡояш.

*С. Муллабаев.*

*КӨНБАҒЫШ*

Баҡсабыҙҙа бер көнбағыш
Май ҡояшы шикелле.
Миңә ҡарап көлөп тора,
Бары йөҙө һипкелле.





## Ужым

Бер үлән юҡ яланда
Һары төҫ ягылмаған.
Тик ужымға һаман да
Көҙ ҡулы ҡағылмаған.

*С. Муллабаев.*

## Мәҡәлдәр

Иген иккән интекмәҫ.
Сиңерткәнән ҡурҡҡан иген икмәҫ.
Ни сәсһәң, шуны урырһың.
Бер тарынан бутҡа булмай.

## Һамаҡтар



Ямғыр, яу, яу, яу!
Иген, үҫ, үҫ, үҫ!
Көтә һине ер, ер, ер,
Тәмле икмәк бир, бир!
Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген үҫһен тау, тау, тау,
Арыштан, бойҙайҙан
Беҙ һорайбыҙ хоҙайҙан.

## Һынамыштар

Ҡар ҡалын булһа, ашлыҡ уңыр.

Беренсе ғинуарҙа йылы булһа, арыш уңыр; ел булһа — тары уңыр; томан булһа — һоло уңыр.

Беренсе мартта буран булһа, ҡарабойҙай уңыр.

Барыс йылы барын сәс, һис булмаһа — тары сәс.

# МИҘГЕЛДӘР
# ВРЕМЕНА ГОДА



ҡыш
зима



яҙ
весна



йәй
лето



көҙ
осень







болот
облако
(туча)



ҡар
снег

боҙ
лёд

ямғыр
дождь

| | |
|---|---|
| ҡар ирей | тает снег |
| ҡыш килә | идёт зима |
| көҙгө муллыҡ | осеннее изобилие |
| яҙғы көн | весенний день |
| болоттар йөҙә | плывут облака |
| ҡара болот | чёрная туча |

Йәй көндәр оҙон, төндәр ҡыҫҡа була.

Летом дни долгие, ночи короткие.

*АЙҘАР* *МЕСЯЦЫ*

| | | | |
|---|---|---|---|
| ҡышҡы: | декабрь | зимние: | декабрь |
| | ғинуар | | январь |
| | февраль | | февраль |
| яҙғы: | март | весенние: | март |
| | апрель | | апрель |
| | май | | май |
| йәйге: | июнь | летние: | июнь |
| | июль | | июль |
| | август | | август |
| көҙгө: | сентябрь | осенние: | сентябрь |
| | октябрь | | октябрь |
| | ноябрь | | ноябрь |

## МӨСӘЛ — ВОСТОЧНЫЙ КАЛЕНДАРЬ



Сысҡан йылы
год Крысы



Һыйыр йылы
год Вола



Барс йылы
год Тигра



Ҡуян йылы
год Кролика



Ылыу йылы
год Дракона



Йылан йылы
год Змеи



Йылҡы йылы
год Лошади



Ҡуй йылы
год Овцы



Маймыл йылы
год Обезьяны



Тауыҡ йылы
год Петуха



Эт йылы
год Собаки



Дуңғыҙ йылы
год Кабана

*НИНДӘЙ КӨНДӘР?*

Дүшәмбе — тыуған көн.
Шишәмбе — атланған көн.
Шаршамбы — ҡан көн.
Кесаҙна — ыйыҡ (изге) көн.
Йома — йөк көн.
Шәмбе — ҡоро көн.
Йәкшәмбе — аҙна көн.

## Һынамыштар

Август айында аяҙ булһа, көҙ бысраҡ булыр.

Көҙ оҙон килһә, яҙ һуң килер.

Имәндә сәтләүек күп булһа, ҡыш ҡаты килә.

Март башында тамсы тамһа, йәй яҡшы килә.

Йәй ҡышҡа ҡарай.

Февралдең айы ҡыҫҡа, ғинуарҙың көнө ҡыҫҡа.

Барс йылы — байлыҡ,
Һыйыр йылы — туҡлыҡ,

Ҡуй йылы — ҡытлыҡ,
Ҡуян йылы— йотлоҡ,
Тауыҡ йылы — сүпләндек,
Сысҡан йылы — еңел йыл,
Йылан йылы — яуынлыҡ,
Маймыл йылы — алан-йолан.

## Йомаҡтар

Бер тирәк, ун ике ботаҡ,
һәр ботаҡта дүрт һабаҡ,
һәр һабаҡта ете япраҡ.

(*Йыл, ай, аҙна, көндәр.*)

Ҡырҙар буш ҡала,
Ямғырҙар яуа,
Ерҙәр дымлана, —
Был ҡайсаҡ була?
(*Көҙ.*)





Һәр ер ҡарланған,
Һыуҙар боҙланған.
Уйнай ел-буран,
Был ҡайсаҡ, туған?
(*Ҡыш.*)

**Мәҡәлдәр**

Яҙ уңмаған, көҙ уңмаҫ.

Яҙғы көн йылды туйҙыра.

Ҡаҙ килһә, яҙ килә.

Ҡар башын ҡар ашай.

Аҫтындағын алты ай эҙләгән.

# КҮК ЕСЕМДӘРЕ
# НЕБЕСНЫЕ ТЕЛА




| | |
|---|---|
| донъя | мир |
| йыһан | космос |
| ер шары | земной шар |
| күләгә | тень |
| ҡотоп | полюс |
| ҡояш ҡалҡа | солнце восходит |
| ҡояш байый | солнце заходит |
| ай ҡалҡа | луна восходит |

| | |
|---|---|
| йондоҙ балҡый | звезда сияет |
| ҡояш йылыта | солнце греет |
| ҡояш нуры | солнечный луч |
| көньяҡ ҡотоп | южный полюс |
| төньяҡ ҡотоп. | северный полюс. |
| Көнсығыштан ел иҫә. | С востока дует ветер. |
| Поезд көнбайышҡа бара. | Поезд идёт на запад. |
| Мәләүез Өфөнән көньяҡта. | Мелеуз расположен к югу от Уфы. |
| Мәләүез Күмертауҙан төньяҡтараҡ. | Мелеуз севернее Кумертау. |




## Мәҡәлдәр

Ай күрҙе — ҡояш алды.

Ҡайҙа барһаң да — бер ҡояш.

Ҡояшта ла тап бар.

Бер күктә ике ай булмай.

## ЙОҠЛАРҒА, ЙОҠЛАРҒА!

*М. Сиражи һүҙҙәре* *Р. Сәхәүетдинова көйө*

Ҡояш йөрөп йыраҡтарҙа,
Ҡайтып төштө офоҡтарға.
Йоҡларға, йоҡларға.
Күр, уттар ҙа
Күҙен йомдо
Күп йорттарҙа.
Ай ҙа сумды
Болоттарға,
Йоҡларға йоҡларға.

## Шиғырҙар

Ҡояш нурҙарын
Болот ҡапланы.
Йылға буйында
Бер йәм ҡалманы.
Иҫемә төштө тылсым һүҙҙәре:
— Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Һалҡын ағай, кит, кит!
Тәтәй ҡалаҡ баҙарҙа, баҙарҙа.
Һөтлө һыйыр яланда, яланда.
Ҡояш ысынлап ишетте мине.
Болоттан ҡасты.
“Уйнайыҡ”, — тине.

*Р. Ураксина.*

Ғәжәпләнә, бик аптырап,
Урамға сыҡҡас Юлай:
— Әсәй, — тине, күккә ҡарап,—
Беҙҙең эйәрсенме ай?
— Эйе, — тигәс ул ҡыуанды:
— Әйтәм, — ти, — шуның өсөн
Беҙҙең арттан ҡалмайынса,
Эйәреп йөрөй кисен.

*С. Муллабаев.*

## Йомаҡтар

Алтын килде —
көмөш китте.
(*Ҡояш һәм ай.*)

Иртә сыға, кисен юғала,
уның урынына
иптәше ҡала.
(*Ҡояш, ай.*)

Алҡанан алтын тама,
тамсыһы ергә етмәй.
(*Йондоҙҙар.*)

Ул булһа, көн була,
ул булмаһа, төн була.
(*Ҡояш.*)

Өйөм башында ярты икмәк.
(*Ай.*)

Һин туҡтаһаң — туҡтай,
Һин барһаң — бара.
Нимә икән ул?
Һин уйлап ҡара.
(*Күләгә.*)

## Һынамыштар

Ай ҡолаҡланһа — көн боҙола.

Ҡояш ҡолаҡланһа — көн һалҡыная.

Йондоҙҙар һирәкләнһә, ямғыр яуа.

Ямғыр яуғанда йәйғор ҡалҡһа, ямғыр туҡтай.

## Һамаҡтар

Яңы ай тыуғанда әйтелә:

*Ай күрҙем аман менән,*
*Ауыҙым тулы иман менән.*
*Ошо айҙа вафат булһам,*
*Үткәр, хоҙай, иман менән.*

Күк күкрәгәндә әйтелгән һүҙҙәр:

*Ерҙән ерән айғыр бир,*
*Күктән күк айғыр бир.*
*Ерҙән ерән айғыр бир!*
*Күктән күк айғыр бир!*

Һыу ингәндә ҡояшты болот
ҡаплаһа, ошо һамаҡ әйтелә:

*Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ!*
*Һалҡын ағай, кит, кит!*
*Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ!*
*Һалҡын ағай, кит, кит!*

Юлға сыҡҡанда әйтелә
торған һүҙҙәр:

*Изге сәғәт, изге юл,*
*Йондоҙҙарым, яҡты бул!*
*Күңелдәрем, шат бул!*

**Көләмәстәр**

Байморат тәҙрәнән тышҡа, һауаға ҡарап ултыра.
Һауала көндөҙгө аҡ ай.
Байморат айға ҡарап тора ла:
— Әсәй, ҡара әле, айҙың йондоҙо янған, — ти.

Һалҡын ҡышҡы көн.
Рәйфә әсәһенә эйәреп тышҡа сыҡты.
Әсәһе ҡояшҡа ҡарай ҙа:
— Бөгөн көн һыуыҡ булыр, ахыры, ҡояш ҡолаҡлана,— ти икән.
Ә Рәйфә:
— Әсәй, ҡояштың да ҡолағы буламы? — тип һорай ғәжәпләнеп.

Ағаһы ҡустыһынан:
— Ҡояш яҡынырaҡмы, әллә аймы? — тип һорай.
— Әлбиттә, ҡояш, — тип яуап бирә.
— Ни өсөн шулай уйлайһың?
— Сөнки ҡояш иртә сыға, ә ай кис булғас ҡына ҡалҡа.

# ТРАНСПОРТ. УРАМ ХӘРӘКӘТЕ
# ТРАНСПОРТ. УЛИЧНОЕ ДВИЖЕНИЕ



автобус



трамвай



троллейбус



самолёт



теплоход



такси



еңел машина
легковая машина



йөк машинаһы
грузовая машина



тимер юл
железная дорога



күпер
мост



юл
дорога




юл саты
перекрёсток




туҡталыш
остановка

### *Һаҡ булығыҙ, балалар! — Осторожно, дети!*

| | |
|---|---|
| туҡтай | останавливается |
| тигеҙ | ровный |
| йәйәү | пешком |
| йәйәүле | пешеход |
| юлаусы (юлсы) | пассажир |
| тәгәрмәс | колесо |
| светофор | светофор |
| һары төҫ | жёлтый цвет |
| ҡыҙыл төҫ | красный цвет |
| йәшел төҫ | зелёный цвет |
| ер аҫты юлы | подземный переход |

| *БИЛДӘЛӘР* | *ЗНАКИ* |
|---|---|
| Туҡта! | Стой! |
| Иғтибар! | Внимание! |
| Бар! | Иди! |



| | |
|---|---|
| шофёр булыу | быть шофёром |
| вагонға инеү | входить в вагон |
| тыныс юл | спокойная дорога |

## Шиғырҙар




*МАШИНАЛАР*

Машиналар келтер-келтер,
Күгәрсендәр гөлдөр-гөлдөр.
Һәр тарафта эш-хәрәкәт,
Ерҙә, күктә бар бәрәкәт.
Аҡ самолёт беҙҙе зәңгәр күккә
Алып менеп китте уратып,
Иптәштәрем ерҙә баҫып ҡалды
Мине алыҫ юлға оҙатып.

*Т. Арслан.*

Эй, саналар, саналар!
Көстө ҡайҙан алалар?
Шыуалар ҙа, шыуалар,
Юл да һалып ҡуялар.

*Г. Юнысова.*

*СВЕТОФОР*

Светофор юлда тора,
Күрһәтә ни бар юлда,
Йә киҫәтә — көтөгөҙ!
Йә рөхсәт, ти, үтегеҙ!
Һары төҫө — иғтибар,
Тимәк юлда хәүеф бар.
Йәшел янһа, юл тыныс,
Ә ҡыҙылы — ҡурҡыныс.
Юл аша сығыр элек,
Тор, дуҫҡай, шуны белеп:
Тик йәшел янһа ғына,
Сыҡ һин юл аръяғына.

*Б. Байым.*



## Йомаҡтар



Суммай ҙа ул,
Осмай ҙа ул,
Ҡоро ергә сыҡмай ҙа ул.
(*Пароход.*)



Бара ла бара,
Тауҙарҙы яра,
Толомо ҡара,
Өҙөлөп ҡала.
(*Паровоз.*)

Үҙе бара, эҙе юҡ.
(*Кәмә.*)



Эй, ат саба, ат саба,
Һығыла дилбегәһе!
Тояҡтары резинка,
Тимерҙән дилбегәһе.
(*Машина.*)



Тау төшкәндә ат була,
менгәндә ағас була.
(*Сана.*)

## Мәҡәлдәр



Бергә-бергә юл ҡыҫҡа.

Юлға сыҡһаң, юлдашың
үҙеңдән яҡшы булһын.

Юл ғазабы — гүр ғазабы.

Йәйәүлегә янсыҡ та ауыр.

## Теләктәр

Аҡ юл!
Аҡ юл һиңә!
Аҡ юл, оҙон ғүмер!
Юлың уң булһын!
Хәйерле юл!
Изге сәғәт — изге юл!
Иҫән йөрөп, һау ҡайт!
Сәфәрең уң булһын!
Иҫән йөрөп, иҫән ҡайт!
Хыҙыр Ильяс юлдаш булһын!

## Көләмәстәр

Бер көндө Айгөлгә өләсәһе әйтә:
— Олатайың хәҙер анау оло юлдан ҡайтып төшөр.
Айгөл юлға ҡарап торҙо ла:
— Ә йәш юл ҡайҙа? — тине.

— Атай, ана беҙ көткән бишенсе трамвай килә, — ти ҡыҙ бала.
— Ни эшләп бишенсе булһын, утыҙ икенсе бит!
— Өскә икене ҡушһаң биш була тип, үҙең өйрәттең бит.

— Ғәли, самолётта оҫҡанда ҡурҡманыңмы? — тип һорайҙар.
— Беренсе тапкыр оҫҡанда ҡурҡкайным.
— Ә һуңынан?
— Белмәйем шул, башҡаса оҫҡаным юҡ әле, — тип яуаплай Ғәли.

# МАГАЗИН. БАҠАР
# МАГАЗИН. БАЗАР




магазин




баҙар
базар




киоск



касса

һатыусы
продавец



аҡса
деньги



үлсәү
весы




күмәртәләп һатыу
торговля оптом



ваҡлап һатыу
розничная торговля

| | |
|---|---|
| һум | рубль |
| тин | копейка |
| ваҡ аҡса | мелочь |
| хаҡ | цена |
| ҡыйбат, ҡиммәт | дорогой |
| осһоҙ, арзан | дешёвый |
| түләй | платит |
| асыҡ | открыто |
| ябыҡ | закрыто |

| | |
|---|---|
| аҙыҡ-түлек магазины | продуктовый магазин |
| өҫ-баш кейемдәре магазины | магазин одежды |
| аяҡ кейемдәре магазины | обувной магазин |
| балалар магазины | детский магазин |
| ит баҙары | мясной базар |
| йәшелсә баҙары | овощной базар |
| “Балалар донъяһы” магазины | магазин “Детский мир” |
| магазин асыу | открыть магазин |
| һатыусы булыу | быть продавцом |

| | |
|---|---|
| Магазин ҡасан асыла? | Когда открывается магазин? |
| Баҙар ҡасан ябыла? | Когда закрывается базар? |
| Күпме тора? | Сколько стоит? |

**Шиғыр**

Магазиндарҙа ул тауар,
Ул тауар, төрлө тауар.
Ни, нәмә теләй йәндәрең,
Шуларҙың бары ла бар.

*Р. Ниғмәти.*

## Көләмәстәр

Магазин янынан үткәндә бала әсәһенән:
— Әсәй, алма алайыҡ әле, — тип һорай.
— Алмалар йоҡлай бит, ҡыҙым, хәҙер һуң инде.
— Уның бәләкәйҙәре генә йоҡлай,
ә беҙ ҙурҙарын алайыҡ.

Илдар атаһына:
— Миңә кәнфит алып ҡайт әле, — ти икән.
Атаһы:
— Кәнфит һатмайҙар, унда ревизия, — тип яуаплай.
Илдар:
— Тәмле булһа, миңә ревизия ла ярай ул.

## Мәҡәлдәр

Аҡса баҡсала үҫмәй.
Аҡсаның күҙе юҡ.
Хәрәм аҡса кеҫә тишә.
Осһоҙҙоң һурпаһы татымаҫ.
Ике тин бер аҡса.
Иҫәпкә бар — һанға юҡ.
Балалы өй — баҙар, балаһыҙ өй — маҙар.
Баҙарға яҡын байымаҫ.
Баҙар ҡыйбат булһа, һатыусынан оят ҡаса.

# ПОЧТА, ТЕЛЕГРАФ




үҙәк почта
почтамт



телефон



хат
письмо




телеграмма




марка



конверт



факс



бандероль

| | |
|---|---|
| хат яҙыу | писать письмо |
| конверт алыу | купить конверт |
| посылка ебәреү | отправить посылку |
| марка йәбештереү | приклеить марку |
| телефондан шылтыратыу | звонить по телефону |

| | |
|---|---|
| Беҙҙең телефоныбыҙ бар. | У нас есть телефон. |
| Әсәйем олатайға шылтырата. | Мама звонит дедушке. |
| Мин өләсәйемә хат яҙҙым. | Я написал бабушке письмо. |
| Атайым — телефонист. | Мой отец — телефонист. |
| Апайым почтаға китте. | Сестра пошла на почту. |

Мин почтальон булам.
Ағайым бандероль ебәргән.
Мин маркалар йыям.
Беҙ Сибайға телеграмма ебәрҙек.
Почта ҡайҙа?
Телеграф эшләйме?

Я буду почтальоном.
Брат прислал бандероль.
Я собираю марки.
Мы отправили телеграмму в Сибай.
Где почта?
Телеграф работает?

## Шиғырҙар

Хаттар яҙһаң, йышыраҡ яҙ,
Хаттар — ярты күрешеү.

*А. Игебаев.*

Беҙ китербеҙ ер ситенә,
Йәмле ҡояш битенә.
Һағынғанда, хат яҙырбыҙ
Аҡ ҡағыҙҙың битенә.

## Мәкәлдәр

Ат етмәгән ергә хат етә.
Сәсән булған егеттең күкрәгендә хат булыр.
Эйәләштереү илсенән, ялҡытыу яусынан.
Хәбәр эйәһе менән йөрөмәй.
Аманатҡа итмә хыянат.

# ПОЛИКЛИНИКА. ДАРЫУХАНА
# ПОЛИКЛИНИКА. АПТЕКА




дарыухана (аптека)
аптека




врач (табип)
врач




дарыу
лекарство



бинт



термометр



йылытҡыс
грелка





рецепт

үлсәү
весы



күҙлек
очки




мамыҡ
вата

| | |
|---|---|
| балалар поликлиникаһы | детская поликлиника |
| ауырта | болит |
| ауырый | болеет |
| теш һыҙлай | зуб болит |
| тамаҡ ауырта | горло болит |
| дауалай | лечит |
| йүткерә | кашляет |
| температура үлсәй | измеряет температуру |
| рецепт бирә | даёт рецепт |
| күҙлек бирә | выписывает очки |
| укол эшләй | делает укол |
| хәстәханала ята | лежит в больнице |
| дарыу һатып ала | покупает лекарство |
| шәфҡәт туташы | медсестра |
| ауырыу | больной (болезнь) |

## Шиғырҙар

*АНДЫҘ*

Һалҡын тейгән олатайға,
Йүткерә бит быуылып.
Дарыуҙар ҙа йотоп ҡарай,
Ҡайсаҡ ала ыуынып.
Ә көҙ еткәс, олатайым
Ҡаҙып алды андыҙҙы.
— Бына минең дарыуым, — тип
Беҙҙе хайран ҡалдырҙы.
— Андыҙ һыуын эсеп торһам,
Һыҙланыуым бөтәр әле,
Ауырыу ҙа ҡасыр, — ти.

*М. Хисамова.*



*ҺАЙ, ТЕШЕМ!*

Күҙҙәрем йомолмай,
Ауыҙым асылмай.
Ай,тешем,уай,тешем,
Һыҙлауы баҫылмай.

*Ш. Ғәлиев.*

## Көләмәстәр

Өс йәшлек Рөстәм илай:
— Бигерәк йөрәгем ауырта, — ти икән.
Ә үҙе табанын ыуалай.

Гәрәй апаһы менән урам буйлап китеп бара.
Шул саҡ Гәрәй өй тәҙрәһенә ҡуйылған термометрҙы күреп ҡала ла:
— Апай, ҡара әле, өй ауырыған! — тип ҡысҡырып ебәрә.

Әсәһе ҡыҙына:
— Римма, ҡар ашама, ауырырһың.
— Юҡ, әсәй, мин уны ялайым ғына.

## Мәҡәлдәр

Һаулыҡ — ҙур байлыҡ.
Һаҡланған һаулыҡҡа туйған.
Арыҡ башым һау булһын.
Байлыҡ — бер айлыҡ, һаулыҡ — ғүмерлек.
Баланың бармағы ауыртыр, инәнең йөрәге ауыртыр.
Кемдең ҡайһы ере ауырта, шуны һөйләй.
Һуҡыр күпте күрер, аҡһаҡ күп йөрөр.

# һөнәр
# ПРОФЕССИЯ



табип
врач



шофёр



көтөүсе
пастух



һауынсы
доярка



уҡытыусы
учитель



ашнаҡсы
повар



рәссам
художник



итексе
сапожник



тегеүсе
швея



инженер



һатыусы
продавец



тимерсе
кузнец



балта оҫтаһы
плотник



тәрбиәсе
воспитатель



комбайнсы
комбайнёр

| | |
|---|---|
| төҙөүсе | строитель |
| яҙыусы | писатель |
| эшләй | работает |
| заводта эшләй | работает на заводе |
| йорт һала | строит дом |
| күлдәк тегә | шьёт платье |
| ер һөрә | пашет землю |
| мал көтә | пасёт скот |

## Йомаҡтар

*БЫЛ КЕМДЕҢ ЭШ ҠОРАЛЫ?*



Ҡағыҙ өҫтөн ҡарайта,
донъя йөҙөн ағарта.
(*Ҡәләм.*)

Бәләкәй генә улан
биленә ҡайыш быуған.
(*Һепертке.*)

Бабайҙа һыңар күҙ,
ә әбейҙә мең күҙ.
(*Энә, уймаҡ.*)

Йүткерә, төкөрә,
төкөрөгө еткәнде үлтерә.
(*Мылтыҡ.*)

Ауыҙы юҡ, бүрәнә ашай.
(*Бысҡы.*)

## Шиғырҙар

*БАЛТА ОҪТАҺЫ*

Беҙгә матур йорт һала,
Ҡарағайҙарҙы өйөп.
Һәр кем маҡтап телгә ала:
"Балта оҫтаһы", — тиеп.
*С. Муллабаев.*

*МИН ТИМЕРСЕ МАЛАЙЫ*

Тимерлеккә килеп һәр көн
Атайыма булышам.
Күмер һалам усағына,
Оло күреген баҫам.
Бик һоҡланып ҡарап торам
Ҡулындағы сүкешкә,
Атайымдай оҫта ҡуллы
Булғым килә һәр эштә.

*С. Муллабаев.*



**Теләктәр**

Берәй эштә ярҙам иткәндә әйтәләр:

*Ҡулыңдан ҡыуан!*
*Ҡулыңдан уң!*
*Ҡул артың еңел булһын!*

Икмәк баҫыр саҡта әйтәләр:

*Ҡулдың ҡеүәтен бирһен!*
*Киң ризыҡҡа яҙһын!*
*Иҫән-һау ашарға яҙһын!*

Умартасы бал алғанда әйтә:

*Ашып сыҡ, тулып сыҡ,*
*ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ.*

## Көләмәстәр

Илшатҡа өс йәш.
— Илшат, атайың ҡайҙа эшләй?
— Байраҡлы өйҙә.
— Илшат, һин кем булаһың?
— Төҙөүсе булам.
— Ниндәй өй төҙөйһөң?
— Түңәрәк өй төҙөйөм.
— Түңәрәк өй буламы?
— Була. Мөйөшкә баҫмаҫ өсөн.

Янғын һүндереүсенең малайы музыка мәктәбенә имтихан бирә.
— Скрипка менән роялдең ниндәй айырмаһы бар? — тип һорайҙар унан.
— Рояль оҙағыраҡ яна, — тип яуап биргән малай.

## Мәҡәлдәр

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә әҙ.
Эштең ояты юҡ.
Эшенә күрә ашы.
Оҫтаның эше ҡиммәт.
Итексенең итеге юҡ.
Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй.
Оҫта барҙа ҡулыңды тый, сәсән барҙа телеңде тый.
Кем эшләмәй — шул ашамай.

# МӘКТӘП ҺӘМ УҠЫУ
# ШКОЛА И УЧЁБА



уҡыусы
ученик



уҡытыусы
учитель




мәктәп
школа



ручка



ҡәләм
карандаш



ҡағыҙ
бумага



парта




дәфтәр
тетрадь



аҡбур
мел

ранец



портфель




китап
книга



буяу
краска




дәреслек
учебник




һүҙлек
словарь



таҡта
доска




көндәлек
дневник

| | |
|---|---|
| белем | знание |
| билдә (баһа) | оценка |
| синыф | класс |
| әлифба | букварь |
| дәрес | урок |
| тәнәфес | перемена |
| каникул | каникулы |
| имтихан | экзамен |
| ҡыңғырау | звонок |
| һорау | вопрос |
| яуап | ответ |
| уҡыу | учёба |
| уҡыу йылы | учебный год |
| уҡый | учится |
| яҙа | пишет |

| | |
|---|---|
| һанай | считает |
| һорай | спрашивает |
| ҡабатлай | повторяет |
| һөйләй | рассказывает |
| тыңлай | слушает |
| өйрәнә | изучает |
| яуап бирә | отвечает |
| рәсем яһай | рисует |
| хатаны төҙәтә | исправляет ошибку |

## Шиғырҙар

*АҠБАЙ УҠЫУСЫ БУЛҒАН*

Нур мәктәпкә китеп бара
Беренсе сентябрҙә.
Аҡбайына: “Ҡалмайһың”, — ти,
Ә сумкаһын, мәҙәк күреп,
Маъмайы тешләп алған.
Бар малайҙар көлөшәләр:
“Аҡбай уҡыусы булған!”

*С. Муллабаев.*

*ТИШЕК СУМКА*

Меҫкен сумканың
Эйәһе Камай.
Нисек ул уны
Сумкаға һанай?
Әйләндергән ул
Уны шыуманға,
Уға ултырып
Тауҙан шыуғанға.
Септә ҡап һымаҡ,
Тишек тә тошоҡ;

Ҡәләме көн дә
Юғала төшөп.
Дәфтәрҙәре лә
Юғалып ҡала.
Уларҙы юлдан
Ел табып ала.
Тик бер әйберен
Юғалтмай Камай.
“Икеле”ләре
Һис төшөп ҡалмай.

*С. Муллабаев.*

## Йомаҡтар

Еҙ һарайым эсендә еҙнәм аты кешнәйҙер.
(*Ҡыңғырау.*)
Үҙем наҙан, үҙем ғүмер буйы яҙам.
(*Ҡәләм.*)
Ямауы бар йөйө юҡ — ҡалаһы бар өйө юҡ.
(*Карта.*)

## Көләмәстәр

Уҡытыусы:
— Кем әйтә ала, бынан ике быуат элек нимәләр булмаған?
— Самолёт, автобус, телефон.
— Тағы?
— Мин булмағанмын.

Әлифба дәресе бара.
Балалар “Ш” хәрефе менән танышалар.
Уҡытыусы:
— “Шамил” һүҙе ни өсөн ҙур хәреф менән яҙылған?
— Сөнки Шамил ағай оҙон.

— Ни өсөн өйгә эшеңде аҙағына тиклем эшләмәнең?
— Тәнәфес бөтөп, дәрес башланды шул.

## Мәҡәлдәр

Ғилем — ҡош, аҡыл — ҡанат.
Уҡыған уңыр, уҡымаған туңыр.
Белеме барҙың ҡәҙере бар.
Ете йорттоң телен бел, ете төрлө белем бел.
Уҡыу кешене күҙле итә.

# КИТАП ҺӘМ КИТАПХАНА
# КНИГА И БИБЛИОТЕКА



китапхана
библиотека



гәзит
газета



китап кәштәһе
книжная полка




китап
книга



китапханасы
библиотекарь




журнал

| | |
|---|---|
| китап уҡый | читает книгу |
| әкиәт китабы | книга сказок |
| китап уҡыусы | читатель |
| балалар китабы | детская книга |
| балалар яҙыусыһы | детский писатель |
| шиғыр яҙа | пишет стихи |
| китапты һаҡлай | бережёт книгу |
| журнал эҙләй | ищет журнал |

Китап — ул хазина. — Книга — это клад.

## Шиғырҙар

Һин бит, китап,
Тормошта юл
Күрһәткән дә!
Һин бит, китап,
Киләсәккә нур
Һипкән дә!

*Г. Юнысова.*




Китап — кәңәшсең һинең,
Дуҫың, ярҙамсың һинең,
Ул хөрмәткә бик хаҡлы,
Ҡәҙерлә һин китапты.

*Х. Шабанов.*

## Йомаҡтар



Юҡ теле, юҡ күҙе,
Һөйләй, өйрәтә үҙе.
Телгә унан оҫта юҡ,
Унан тоғро дуҫ та юҡ.

(*Китап.*)

Ағас түгел — япраҡлы,
тун түгел — тегелгән.

(*Китап.*)

## Мәҡәлдәр

Китап — белем шишмәһе.

Ҡәләм тотҡан юғалмаҫ.

Оҙон һүҙ китапҡа яҡшы.

# БӨТӘ МУЗАЛАР БЕҘҘӘ ҠУНАҠТА
# ВСЕ МУЗЫ У НАС В ГОСТЯХ



шаршау (пәрҙә)
занавес



театр

цирк

декорация



сәхнә
сцена



ҡумыҙ
кубыз (варган)

думбыра
домбра











йыр
песня

ҡурай
курай

бейеү
танец

Башҡортостан
Республикаһының милли музейы
Национальный музей
Республики Башкортостан






Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры
Башкирский государственный
театр кукол



Башҡорт дәүләт опера һәм балет
театры
Башкирский государственный театр
оперы и балета

| | |
|---|---|
| йорт-музей | дом-музей |
| тарих музейы | исторический музей |
| театрға йөрөү | ходить в театр |
| кинотеатр | кинотеатр |
| кинофильм | кинофильм |
| йәнһүрәт | мультфильм |
| дирижёр | дирижёр |
| музыкант | музыкант |
| композитор | композитор |
| артист | артист |

| | |
|---|---|
| балерина | балерина |
| һүрәт | рисунок |
| рәсем | портрет |
| моң | мелодия |
| ҡыл ҡумыҙ | кыл-кубыз |
| һорнай | горн |
| думбыра сиртә | играет на домбре |
| халыҡ музыка ҡоралдары | народные музыкальные инструменты |

*ҠУРАЙСЫ*

Китте ҡурайсы дуҫ.
Ҡыуышымда ул ҡалдырып китте ҡурайын.
Сыҡмаҫмы тип, берәй көйө шунда,
Ҡыу ҡурайға өрөп ҡарайым.
Юҡ, моңланмай ҡурай ят ҡулдарҙа.

*Р. Ғарипов.*



Кил һин ҡаршыма,
Барыһын һөйләйем.
Һиңә ҡурайҙан
Бер көй уйнайым.

*Д. Юлтый.*

*ДУМБЫРА*

Эй, думбырам, думбырам,
Уйна, күңел асылһын.
Думбырам менең уйнайҙыр,
Ҡыл ҡумыҙым һарнайҙыр,
Тыңлай килгән әҙәмдәр
Үҙен-үҙе белмәйҙер!

# БАЙРАМДАР, ЙОЛАЛАР
# ПРАЗДНИКИ, ОБЫЧАИ



тыуған көн
день рождения



Яңы йыл
Новый год



Белем көнө
День знаний



Республика көнө
День Республики



Әсә йылы
Год матери





8 Март
8 Марта



Ҡорбан байрамы
Курбан-байрам

Науруз байрамы
Науруз



Ураҙа байрамы
Ураза-байрам



Һабантуй
Сабантуй



ҡарға бутҡаһы
воронья каша



туй
свадьба

3—1717

| | |
|---|---|
| бүләк | подарок |
| саҡыра | приглашает |
| ҡунаҡ | гость |
| торт | торт |
| Ҡарһылыу | Снегурочка |
| Ҡыш бабай | Дед Мороз |
| көрәш | борьба |
| бәйге | скачки |
| ҡарға бутҡаһы | воронья каша |
| кәкүк сәйе | кукушкин чай |
| ҡуҙғалаҡ байрамы | праздник щавеля |
| туй күлдәге | свадебное платье |
| өмә | помочь |
| ерләү йолаһы | похоронные обряды |
| доға уҡыу | читать молитву |
| мәсеткә барыу | ходить в мечеть |

| | |
|---|---|
| Бөгөн байрам. | Сегодня праздник. |
| Ҡотлайым! | Поздравляю! |
| 8 Март — Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө. | 8 Марта — Международный женский день. |

## Әйтемдәр

*Бәхетле бул, тәүфиҡлы бул,татлы телле бул!*
*Мунса ташы, бүрәнә башы,таштай нык бул!*
*Бүрәнәләй бүкән бул!*

*Аталы-инәле, алтын ҡанатлы бул!*
*Һүҙҙәрең өҫтөн, йөҙҙәрең күркәм,*
*ҡулдарың эшсән булһын!*
*Су-у-уп, су-у-уп!*

## Теләктәр

Һабантуй ҡотло булһын!
Байрам менән ҡотлайым!
Байрам менән!
Тыуған көнөң менән!
Ураҙағыҙ ҡабул булһын!
Ҡорбанығыҙ ҡабул булһын!
Туйығыҙ ҡотло булһын!
Нар, нар, нарына, бәхет бирһен барына!
Һабантуйға барығыҙ, ҡотлап бүләк һалығыҙ!
Таҫтамалдар һалығыҙ, һөлгөләр ҙә тағығыҙ!
Республика көнө менән ҡотлайым!
Илең, йортоң һил булһын, күңелегеҙ киң булһын!
Ҡорбан байрамы ҡотло булһын.
Көнө имен торһон, ҡото йоҡһон!

## Мәҡәлдәр

Байрам ашы — ҡара ҡаршы.
Ялҡауға көн дә байрам, көн дә туй.
Бойҙай уңһа, аш булыр, уңмаһа — таш булыр.
Науруз йылға баш булыр.
Бойҙай — ашҡа баш.

# ФИЗКУЛЬТУРА ҺӘМ СПОРТ
# ФИЗКУЛЬТУРА И СПОРТ



туп
мяч



саңғы таяғы
лыжная палка

саңғы
лыжи



сана
сани



сәкән
клюшка



йәйә
лук

уҡ
стрела



көрәш
борьба



шашка
шашки



бәйге
скачки



шахмат
шахматы



хоккей



футбол

| | |
|---|---|
| ярыш (уҙыш) | соревнование |
| уйын ҡағиҙәләре | правила игры |
| шыбаға тотошоу | жеребьёвка |
| футбол майҙаны | футбольное поле |
| ҡапҡалар | ворота |
| футболсы | футболист |
| уйнаусы | игрок |
| ҡапҡасы | вратарь |
| йәйәнән уҡ атыу ярыштары | соревнования по стрельбе из лука |
| сәп | мишень |
| мәрәй | очко |
| көйәрмән | болельщик |
| тауҙан төшә | спускается с горы |
| санала уҙышыу | гонки на санках (бобслей) |
| сана шыуыу | катание на санках |
| саңғы ярышы | лыжные соревнования |
| саңғы юлы | лыжня |
| иң мәргән | самый меткий |
| алыш | схватка |
| милли көрәш | национальная борьба |
| теннис уйнау | игра в теннис |
| теннис ракеткаһы | теннисная ракетка |
| Кем көслөрәк? | Кто сильнее? |
| Кемдәр еңә? | Кто выигрывает? |

## Шиғырҙар

*КӨС*

Бер, ике, өс ...,
бер , ике, өс ...,
Беләктәргә, йөрәктәргә
Инһен көс!

*ГОЛ*

Футбол уйнарға бик әүәҫ,
Класташым Миңлеғол.
Тупты ҡапҡаға индерһә,
Ҡысҡырып ебәрә: “Гол!”

*С. Муллабаев.*

### *МИН ҮҪӘМ*

Ағаҫҡа ла үрмәләйем,
Ҡыйыҡтан осоп төшәм,
Һыуҙа йөҙәм,
Сабам ерҙән, ә үҙем
Һаман үҫәм!

*Р. Әбүталипова.*

### *ТУП*

Таня илай ҡысҡырып:
Тубы төшкән йылғаға.
Ҡуйсы, Таня, илама,
Туп батмай ул йылғала.

*А. Барто.*

## **Мәҡәлдәр**

Атҡан уҡ кире ҡайтмаҫ.
Итһәң хәрәкәт — булыр бәрәкәт.
Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә.
Йүгереп ҡуян ҡыуалар, ултырып аҡыл йыялар.
Алыҫ менән яҡынды юртҡан белер.
Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә.
Уланлы ерҙә уғры ятмаҫ.

# МИНЕҢ ИЛЕМ — БАШҠОРТОСТАН
# МОЯ РОДИНА — БАШКОРТОСТАН



Башҡортостан Республикаһының
президенты Мортаза Рәхимов
Президент Республики Башкортостан
Муртаза Рахимов



Башҡортостан Республикаһының
дәүләт флагы
Государственный флаг
Республики Башкортостан



Башҡортостан Республикаһының
дәүләт гербы
Государственный герб
Республики Башкортостан

Өфө ҡалаһы гербы
герб города Уфы






Башҡортостан Республикаһының картаһы
карта Республики Башкортостан

| | |
|---|---|
| Башҡортостанда йәшәй | живёт в Башкортостане |
| Башҡортостан халҡы | народ Башкортостана |
| Башҡортостандың тәбиғәте | природа Башкортостана |
| башҡорттар | башкиры |
| башҡорт теле | башкирский язык |
| башҡорт яҙыусылары | башкирские писатели |
| башҡорт әкиәттәре | башкирские сказки |
| башҡорт йырҙары | башкирские песни |

## Шиғырҙар

*ТЫУҒАН ИЛЕМ*



Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым —
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.
Күгәреп күккә үрелгән
Ҡарлы башлы Уралдың,
Күҙҙең яуын алырҙай
Матурлығын ҡырҙарҙың
Мәңге маҡтар инем мин,
Мәңге данлар инем мин.

*Салауат Юлаев.*

### *УРАЛ ЙӨРӘГЕ*

Урал күкрәгендә йөрәк кеүек
Башҡортостан — тыуған илкәйем.
Шул йөрәктең ҡан тамыры булып,
Күкһелләнә Ағиҙелкәйем.

*Р. Ғарипов.*

### *ҠАЙЫН ЯПРАҒЫ*

Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына,
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.

*М. Кәрим.*

## Мәҡәлдәр

Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуып-үҫкән ил яҡшы.

Тыуған илдең ҡәҙерен ситтә йөрөһәң — белерһең.

Тыуған илдән туйған юҡ.

Иле ныҡтың биле ныҡ.

Илен белмәгән — тиле.

# ӨФӨ — БАШҠОРТОСТАНДЫҢ БАШ ҠАЛАҺЫ
# УФА — СТОЛИЦА БАШКОРТОСТАНА



Салауат Юлаев һәйкәле
памятник Салавату Юлаеву



Дуҫлыҡ монументы
монумент Дружбы



Республика йорто
Дом Республики



Өфө ҡала хакимиәте
администрация г. Уфы



Ләлә-Тюльпан
мәсете
мечеть Ляля-Тюльпан



мәсет
мечеть



сиркәү
церковь



Өфө урамдары
улицы Уфы



Башҡорт дәүләт университеты
Башкирский государственный
университет



М.В. Нестеров исемендәге
башҡорт дәүләт
сәнғәт музейы
Башкирский
государственный
художественный музей
имени М.В. Нестерова



И. Якутов исемендәге
балалар паркы
Детский парк имени
И. Якутова



Өфө циркы
Уфимский цирк



М. Ғафури исемендәге
Башҡорт академия
драма театры
Башкирский академический
театр драмы имени М. Гафури



Нефтселәр мәҙәниәт һарайы
Дворец культуры нефтяников



Спорт һарайы
Дворец спорта

*МАТУР ӨФӨ ҠАЛАҺЫ*

*К. Даян һүҙҙәре* *М. Вәлиев көйө*

Ағиҙелдең буйы йәмле,
Гөл-сәскәле далаһы.
Шул Иҙелдең буйҙарында
Матур Өфө ҡалаһы.

*Ҡушымта:*

Эх, Өфө ҡалаһы,
Ағиҙелдең буйында.
Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә,
Һин булырһың уйымда.

Өфө баҡсалары матур
Гөл-сәскәгә күмелгән.
Йәйге көндә бер күрһәң дә,
Мәңге китмәй күңелдән.

*Ҡушымта.*

Өфө урамдары асфальт,
Бейек яңы йорттары.
Ҡара төндө көндөҙ итә
Балҡып янған уттары.

*Ҡушымта.*

## *ЙӨКМӘТКЕҺЕ*
## *СОДЕРЖАНИЕ*

От автора
Авторҙан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Мин һәм минең ғаиләм
Я и моя семья . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 4
Уйындар һәм уйынсыҡтар
Игры и игрушки . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 7
Минең тәнем
Моё тело . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 10
Беҙҙең өй
Наш дом . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 14
Һауыт-һаба
Посуда . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 19
Аш-һыу
Пища . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 22
Өҫ-баш һәм аяҡ кейемдәре
Одежда и обувь . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 27
Йорт хайуандары
Домашние животные . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 32
Ҡырағай хайуандар
Дикие животные . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 36
Йорт ҡоштары
Домашние птицы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 40
Ҡоштар
Птицы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
Балыҡтар
Рыбы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 45
Бөжәктәр
Насекомые . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 48
Емеш-еләк
Фрукты и ягоды . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
Йәшелсәләр
Овощи . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 54

Ағастар
Деревья .................................................57
Сәскәләр һәм үләндәр
Цветы и травы ........................................... 60
Бөртөклө культуралар
Зерновые культуры ....................................... 65
Миҙгелдәр
Времена года ............................................68
Күк есемдәре
Небесные тела ...........................................73
Транспорт. Урам хәрәкәте
Транспорт. Уличное движение .............................78
Магазин. Баҙар
Магазин. Базар .......................................... 83
Почта. Телеграф ......................................... 86
Поликлиника. Дарыухана
Поликлиника. Аптека .....................................88
Һөнәр
Профессия ...............................................91
Мәктәп һәм уҡыу
Школа и учёба ........................................... 96
Китап һәм китапхана
Книги и библиотека ......................................100
Бөтә музалар беҙҙә ҡунаҡта
Все музы у нас в гостях ................................ 102
Байрамдар, йолалар
Праздники, обычаи .......................................105
Физкультура һәм спорт
Физкультура и спорт .................................... 108
Минең илем — Башҡортостан
Моя родина — Башкортостан ...............................111
Өфө — Башҡортостандың баш ҡалаһы
Уфа — столица Башкортостана .............................114

**Фирдаус Гильмитдиновна Хисамитдинова**

БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК ДЛЯ МАЛЫШЕЙ
(учебное пособие)

Редактор Х.Х. Мингажитдинова
Художественный редактор Л.Н. Халимова
Технический редактор М.М. Мустафин
Корректор Р.М. Ахмедьянова
Компьютерная вёрстка Л.Н. Халимова
Набор Р.К. Иштакбаева

Лиц. ИД № 04495 от 12.04.2001.
Сдано в набор 07.08.01. Подписано в печать 16.08.02.
Формат 70x100/$_{16}$. Бумага офсетная. Гарнитура Прагматика.
Печать офсетная. Усл. печ. л. 9,68. Уч.-изд. л. 6,07.
Тираж 3000 экз. Заказ №1717.

Научное издательство "Башкирская энциклопедия".
450052, Уфа, ул. Аксакова, 62.
Отпечатано с предоставленных файлов на ГУП "Уфимский полиграфкомбинат".
450001, Уфа, пр. Октября, 2.

